**Күсереп яҙыу**

Һәйкәл

Салауат Юлаев – башҡорт халыҡ батыры. Өфө ҡалаһында уға һәйкәл ҡуйылған. Һәйкәлгә һәр саҡ тере сәскәләр һалалар.

**Һорауҙарға яуаптар**

Һинең исемең нисек?

Һиңә нисә йәш?

Һин нисәнсе класта уҡыйһың?

Һеҙҙең ғаиләлә нисә кеше?

Башҡорт теленән кем уҡыта?

Башҡорт теле дәресендә нимәләр эшләйһегеҙ?

Диктант

Дежур

Класта мин дежур. Класс таҙа. Мин форточканы асам. Таҡтаны һөртәм.

**3-сө класс**

**Контроль күсереп яҙыу**

Өфө

Өфө – беҙҙең баш ҡала. Унда мәктәптәр бик күп. Балалар тырышып уҡыйҙар, дуҫ йәшәйҙәр.

Нәғим менән Сәлмән ағай Өфө витамин заводында эшләйҙәр. Улар төрлө витаминдар сығаралар.

**Диктант**

Китап

Китап белем бирә. Китапты яратырға кәрәк. Мин китап уҡыйым. Китапты яратам, һаҡлап тотам. Минең китаптарым күп.

**Диктант**

Мәктәптә байрам

Бөгөн көн матур. Беҙ мәктәпкә иртә килдек. Мәктәптә уҡыусылар күп йыйылған. Бөгөн мәктәптә ҙур байрам була. Бөтәһе лә ҡупшы кейенгән, бөтәһе лә шатланалар, көлөшәләр.

**4-се класс**

**Диктант**

Көҙ

Йәйҙең күңелле көндәре үтеп китте. Тәбиғәттә хәҙер көҙ билдәләре көндән-көн күренә. Көндәр ҡыҫҡарғандан-ҡыҫҡара, ә төндәр оҙоная бара. Төндәрен һалҡынайта, ер өҫтөнә ап–аҡ ҡырау төшә.

Урмандар һәм баҡсалар, тәрән уйға сумып, тынып ҡалған. Уларҙың йәйге шау-шыулы саҡтары үтеп китте.

**Диктант**

**Яҙ етте**

Йәмле яҙ етте. Бөтә ерҙә ҡар ирей. Көндәр оҙая, төндәр ҡыҫҡара. Урамдарҙа гөрләүектәр аға. Ҡыйыҡтарҙан тамсылар тама.Урамда күләүектәр. Ҡояш нығыраҡ ҡыҙҙыра. Йылы яҡтан ҡара ҡарғалар, сыйырсыҡтар, ҡарлуғастар, һандуғастар, аҡҡоштар ҡайталар. Балалар сыйырсыҡ ояһы яһай. Яҙҙың беренсе сәскәһе-умырзая күренә.

**Диктант**

**Әсәйем**

Минең әсәйем Миңнур исемле. Ул мәҙәниәт йортонда эшләй. Әсәйем аҡыллы, яғымлы кеше. Ул бөтә ергә лә өлгөрә.Уның наҙлы йомшаҡ ҡулдары бер ҡасан да тик тормай: икмәк бешерә, кер йыуа, ойоҡбаш бәйләй. Бешергән аштары теленде йоторлоҡ. Йылы, йомшаҡ, наҙлы ҡулдары менән башымды һыйпағанын яратам.